# МҮК ЕЛӘГЕ

Бик һәйбәт кенә эшләп йөрөгән ерҙән ҡапыл ғына ауырыны ла китте Гөльямал. Көн буйына, әллә ниңә эсемде ҡатыу алып тора, башым да ауыртҡан төҫлө, тип йөрөнө лә кискә табан бөтөнләй аяҡтан йығылды.

Хәйруш, нишләргә лә белмәй, аптыраны ла ҡалды. Әсәләре, Хәсби ҡарсыҡ:

— Зәхмәт ҡағылғандыр. Сәләй мулланың тыны бик килешә, тиҙәр, өшкөртөп ҡарарға кәрәк,— ти. Хәйрүш башта риза булмай торҙо.

— Бер ҙә борсағым да бешмәй шул мулла менән, йәй көнө малайы минең көлтәне урлағас, бик ҡаты талашҡайным үҙе менән.

«Үлһәң, йыназа уҡырға бармам» тип ҡалғайны. Хәҙер инде нисек итеп шуға йөҙ һыуыңды түкмәк кәрәк?

— Ҡуй, ҡуй, балам, үҙем саҡырам хәҙер,— ти Хәсби ҡарсыҡ. Шунда уҡ бишмәтен ябына башланы.— Ундай саҡта шундай юҡ-барҙы уйлап торалармы һуң. Урлаһа, гөнаһы үҙенә булыр. Нисек булһа ла мулла кеше әле ул...

Аптыраны ла ҡалды Хәйрүш. Бер ҙә былай мулла менән эш итергә тура килгәне юҡ ине. Атаһынан бик йәшләй етем ҡалып үҫте. Әле бисә алыуына ла бер генә йыл тула. Йәштән үк ауыр, ҡара эшкә бирелде лә, дин-маҙар тураһында уйланып торорға йәки намаҙға-маҙарға йөрөргә лә ваҡыты булманы. Бәләкәй сағында, әсәһе ҡушыуынса, бер ғәйеткә барғайны, унда ла мәсет йортонда малайҙар менән шаярып ҡалып, яңылыштан мәсет тәҙрәһенә таш тейҙереп ватҡас, үҙен бик ҡаты туҡмағайнылар. Шунан бирле Хәйрүштең мәсеткә барғаны булманы. Хәсби ҡарсыҡ:

— Олоғайып бараһың, улым, әхирәт тураһында уйлай башларға ваҡыт,— тип ҡараһа ла, Хәйрүш бер ҙә ул турала уйлай алманы.

Ҡайһы саҡта дин, алла тураһындағы уйҙар, кис яҭкас, килһәләр ҙә, ул уларҙың осона сыға алманы... Әгәр ҙә береһе унан:

— Әйт әле, Хәйрүш, һинеңсә, алла бармы, юҡмы?— тип һораһа, ул:

— Әллә, чурт белһенме уны! — тиеүҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмаҫ ине.

Бына әле Хәсби ҡарсыҡ муллаға сығып йүгерҙе. Мулла файҙа итәсәкме инде уға? Хәйрүш ышанмай ул муллаға. Ләкин ҡарсыҡтың хәтерен ҡалдырғыһы килмәй...

Гөльямал һис йүнәлер төҫлө түгел. Башы ут кеүек, яна. Күҙҙәре лә төпкә батҡандар. Хәйрүш уның баш осона ултырып, ҡулдарын тотҡолай, мендәрен төҙәткеләштерә, хәлен һораша. Ләкин ауырыуҙың хәлен еңеләйтерлек бер нәмә лә эшләй алмай.

— Мәшәҡәт булыр шул инде... Күрше ауылға больницаға алып барһаң... Беҙҙең Йосоп ауырыны иһә, шунда бара торғайны...

Гөльямал бик ауырлыҡ менән, күсөн йыйып ҡына һөйләй. Хәйрүш дәртләнеп китә:

— Үҙеңә ауырға килмәһә, хәҙер үк алып китәм. Әллә ҡайҙа алып барырға ризамын...

Ул арала булмай, Хәсби ҡарсыҡ та ҡайтып етте. Үҙенең тындары бөткән.

— Ярай әле, өйҙә осраттым. Бына бик һәйбәтләп мүк еләген өшкөрөп бирҙе. «Килеп яҡшы иткәнһең, еңгә, ти. Алла ҡушһа, йыяһы ризығы булһа, бына хәҙер аяҡҡа баҫыр, ти. Балнис мәрйәләренә барып йөрөй күрмәгеҙ тағы, ти. Беҙ бер аллаға ғына ышанабыҙ. Инша алла, терелер» — тип ҡалды. Оҫтабикә лә ауырға ҡалып тора икән әле.

Хәйрүш больницаға алып барам тип ҡараһа ла, ҡарсыҡ яҡын да килмәне.

— Ҡуй, балаҡайым, юҡты һөйләмә. Кафер халҡына йөрөтәләрме һуң?! Ауыҙыңдан ел алһын! Ҡайҙа әле, килен, бисмилла итеп эсеп ебәр.

Гөльямал һалҡын һыуға һалынған мүк еләге болғансығын бик ерәнеп кенә эсте. Һалҡынлыҡ уның бөтә тәненә йүгерҙе. Бөтә тәне ҡалтырай башланы.

Бер көн үтте, ике көн үтте. Гөльямалдың хәле яҡшыланыу ғына түгел, насарлана барҙы. Хәҙер инде ул йүнләп һөйләшә лә, рәтләп ашай ҙа алмай. Аҙ ғына күҙен йомһа, һаташа башлай.

Хәйрүш түҙмәне. Бер көндө, иртән торғас та, больницаға барырға әҙерләнә башланы. Ләкин ҡарсыҡ һис риза булаһы түгел.

— Мулланың үҙен бында алып киләм, ете аҙан менән өсҫтөнә өшкөртөргә кәрәк! — ти, ҡаршы тора. Шулай аптырашып торғанда, Гөльямалдың ҡустыһы комсомол Йосоп килеп инде.

— Һаман да больницаға алып китмәнеңме ни әле, еҙнә? — ти.— Ну бөткән халыҡ та инде! Фельдшер ана үҙе беҙҙең ауылда йөрөй, тиҙәр...

Хәсбекәй уға тотоп йәбеште.

— Һин инде, ҡоҙа, минең ғәйебемде ҡуҙғатмаһаң да ярар ине. Динем, иманым таҙа саҡта, мәрйәләргә барып йөрөмәм, һин үҙең комсомол булғас та...

Хәйрүш үҙе лә һүҙгә ҡушылып китте:

— Ҡарап, ҡарап торам да инде, һин гел генә кирегә һөйрәйһең. Хәтерең ҡалмаһын, һинең теге мүк еләгеңде эскәс, тағы ла бөтөрөнөп китте киленең...

Хәйрүш тә былай ҡаршы һөйләй башлағас, ҡарсыҡ бер аҙ йомшара төштө. Үпкәләгән кеүегерәк итеп:

— Әйҙә инде, заманаһы шуға ҡалғас, нишләтәһең, бит... Ата-әсә һүҙе һүҙ түгел...

Йосоп, ҡарсыҡтың хәтерен ҡалдырмаҫҡа тырышты.

— Ҡоҙағый, һин асыуланма әле. Ауырыу кешене терелтергә кәрәкме? Кәрәк...

— Бына тағы бер һүҙ. Мин киленгә яҡшылыҡтан башҡа бер нәмә лә эшләгәнем юҡ...

— Туҡта әле, уныһы шулай. Рәхмәт уныһы өсөн. Шулай булғас, ниңә муллаға барырға кәрәк? Ундай саҡта бит больницаға баралар, докторға күрһәтәләр. Ә һеҙ әллә ниндәй мулла төкөргән һыу эсергәнһегеҙ...

Мин хәҙер фельдшерға йүгерәм. Ул үҙе ниндәйҙер эш менән бында килгән...

Оҙаҡ та үтмәне, ҡаласа кейенгән, ҡулына бәләкәй генә шкатулка тотҡан йәш кенә ҡатын килеп инде.

— Бик йәш мәрйә икән,— тип уйланы Хәсбекәй әбей.

Ләкин фельдшерицаның беренсе һүҙенән үк ғәжәпкә ҡалды.

— Ауырыу һеҙҙең иптәшегеҙ булырға кәрәк? Хәйрүш үҙен ғәйепле итеп һиҙгән кеүек:

— Минең йәмәғәт була ине лә һуң...— тине.

Фельдшерица пальтоһын һалып ташланы ла шкатулкаһын аҡтарырға тотондо. Хәсбекәй әбей, яҡынырак килеп:

— Үҙебеҙҙең мосолман кеше икән дәбаһа! — тине. Фельдшерица уға иғтибар итмәне.

— Ауырыу күптән ятамы?

— Дүртенсе көнгә китте.

— Ай-һай, оҙаҡлатҡанһығыҙ, шунда уҡ больницаға барырға ине. - Ул кескәй торба менән ауырыуҙың күкрәген тыңларға, тәндәрен ҡараштырырға тотондо.

Ул арала комсомол Йосоп килеп инде.

— Ана мулла үҙе бер ҙә өшкөрөп маташмай. Оҫтабикәһе ауырый башлағас та, тиҙерәк больницаға киткән. Был иптәште ул алып килгән...

Фельдшерица ауырыуҙың эстәрен баҫҡылаштырып ҡараны ла:

— Ауырыуҙың хәле шәптән түгел. Бик яйлап ҡына больницаға алып барырға кәрәк. Етмәһә, һалҡын һуҡҡан. Ниндәй һыу эсерәһегеҙ?

Хәйрүш башта ыҡ-мыҡ итеп торҙо. Ҡарсыҡ мейес алдына барып, самауыр ҡуйырға тотондо.

— Мулланан мүк еләге өшкөртөп эсергәйнек...

— Их, иптәш, шулай яраймы? Муллаға баралармы ни? Ана ул үҙе бер ҙә өшкөрөп-нитеп тормаған — тиҙерәк беҙгә барып еткән. Алдашалар бит улар, иптәш, аңларға кәрәк инде аҙыраҡ. Ауылығыҙҙа уҡыу өйө бар, яңыса торорға өйрәнергә ваҡыт. Бынан һуң, пожалуйста, шул муллалар, ҡарсыҡ-ҡорсоҡтар һүҙенә ышанмағыҙ. Уларҙың ырымдары ҡәбергә илтеп тыға кешене... Ҡайҙа, яйлап ҡына, аҫтына яҫтыҡ һалып, больницаға алып барығыҙ хәҙер.

Больницала бер аҙна ятҡас, Гөльямал таҙарҙы.

Ун биш көн үтеүгә инде ул бөтөнләй элекке хәленә ҡайтты.

Хәсбекәй әбей ҙә килененең шәбәйеүенә шатланып йөрөй. Гөльямалдың көндән-көн үҫә барған эсенә ҡарай ҙа бала буласағы тураһында, үҙенең ул баланы ҡараясағы тураһында уйлай. Бер ваҡыт ул Хәйрүшкә лә әйтте:

— Хәйретдин балам, лапаҫта былтырҙан ҡалған яңы ҡабығың бар. Сәңгелдәк яһап ҡуй... Бик һәйбәтләп мулла менән мәзиндең икеһен дә саҡырып исем туйы үткәрербеҙ, алла бирһә — бәхете, тәүфиғы менән генә үҫһен инде.

Хәйрүш элекке ваҡытта ҡарсыҡҡа ҡырт ҡына һүҙ әйткәне юҡ ине. Был юлы өҙҙө лә ҡуйҙы:

— Инде миңә һөйләмә шул мулла тураһында, суҡынып китһен, ышанмайым, әҙе лә булмаһын! Ауылдан ҡыуырға кәрәк әле уны...

— Бәй, бәй, балаҡайым, ул ниндәй эш, нисек исем ҡушырһың муллаһыҙ?

— Юҡ өсөн ҡайғырма әле. Комсомолдар ана балаң булды тиһә, үҙебеҙ исем ҡушабыҙ тип торалар.

— Тәүбә әстәғәфирулла, әллә нәмәләр ишетерһең әле!..

Хәсбекәй әбей Хәйрүштең был һүҙенә бик асыуланһа ла, башҡа яуап ҡайтарманы.

— Замандар үҙгәрҙе, көн дә бер яңылыҡ уйлап сығарып торалар, барыбер тыңламаҫтар инде ҡарттар һүҙен... — тип уйланы.